Ғилем һәм ғәмәл

# ИСЛАМДЫҢ ҮҘ-ҮҘЕНӘ ҠУЛ ҺАЛЫУҒА ХӨКӨМӨ ПРОБЛЕМАҒА ҠАРАШ ҺӘМ ДАУАЛАУ

Әбү Ясин,
Руслан Маликов



Ғүмер - беҙгә билдәле бер мөҙҙәткә тиклем бирелгән Аллаһ бүләге. Аллаһ Рәсүле (с.ғ.с.) әйтте:

"Бер кешенең йәрәхәте бар ине һәм ул үҙен үлтерҙе. Шул саҡ Аллаһ әйтте: "Минең ҡолом ашыҡты, хәҙер уға Йәннәт бикле" (7).

Ауыр сиргә тарыған кеше, Аллаға хәлен еңеләйтеүен, йүнәлтеүен һорап, ялбарып доға ҡылырға, һәм нык булырға тейеш, үҙенә ҡул һалыу уйы һис кенә лә башына килмәһен.

ДИНИ РИТУАЛҒА БӘЙЛЕ ҮҘ-ҮҘЕНӘ ҠУЛ ҺАЛЫУ (ҒӘҘӘТТӘ, СЕКТАЛАРҘА ТАРАЛҒАН)

Ислам бер ҡасан да емерткес эшмәкәрлекте ҡабул итмәй. Шәриғәттең маҡсаты - был донъяла кеше ғүмерен һаҡлау, тормошон яҡшыртыу: 1) динде, 2) намыҫты-выжданды, 3) тоҡом-затты, 4) аҡылды, 5) мөлкәттре һаҡлау. Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә әйтә:

***"Үҙегеҙҙе үҙегеҙ үлтермәгеҙ. Шул хаҡ, Аллаһы тәғәлә һеҙгә мәрхәмәтле бит. Үҙенең дошманлығы һәм хаҡһыҙлығы арҡаһында быны эшләгәндәрҙе Утта яндырасаҡбыҙ. Был Аллаһы Тәғәлә өсөн анһат".*** (Ҡөрьән, 4: 29-30).

Ислам кешегә үҙенең йәнен ҡыйыуҙы ҡаты тыя, ул ғына түгел, Ҡөрьән Аллаһы Тәғәлә һәм Уның Рәсүле әмерҙәренә буйһонорға бойора, сөнки ул әмерҙәрҙе үтәү - тормошобоҙҙо яҡшыраҡ һәм бәхетлерәк итә. Әгәр ҙә кеше фани донъя ниғмәттәрен яулар, йәки ауырлыҡтарын хәл итер өсөн харам юлға баҫа икән, һәҙемтәһе ҡот осҡос буласаҡ, сөнки беҙ бөтәбеҙ ҙә Раббыбыҙ янына ҡайтасаҡбыҙ һәм ғәмәлдәребеҙ өсөн яуап тотасаҡбыҙ. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

***"Эй, һеҙ иманға килгәндәр! Ул һеҙҙе тереклек сығанағына (Ҡөрьәнгә) саҡырһа, Аллаһҡа һәм уның Рәсүленә буйһоноғоҙ, һәм белеп тороғоҙ, Аллаһ кеше һәм уның йөрәге араһында булыр (йәғни кеше үҙе теләгәнгә өлгәшеүенә ҡамасау итеүе мөмкин) һәм һеҙ барығыҙ ҙа Уның янына йыйыласаҡһығыҙ"*** (Ҡөрьән, 8:24).

Ислам был донъяны кешенең тәбиғи булмышына ярашлы итеп, рухи һәм физик аһәңлеген берләштереп, яйға һалған. Кеше бер сиктән икенсеһенә барып төшмәһен өсөн, Динебеҙ тигеҙлекте һәм тотороҡлолоҡто бар иткән. Ислам был донъяны кире ҡаҡмай һәм уны әҙәм балаһы ҡотолорға тейешле яуызлыҡ, тип һанамай. Фани донъя үҙенән-үҙе насар түгел, ләкин ҡайһы бер кешеләрҙең унда ҡылған ҡылыҡтары насар. Фани донъя - Йәннәткә йәки Йәһәннәмгә барыу юлындағы күпер. Шулай уҡ ул Ахирәт өсөн баҫыу, унда кеше йәннәткә барыр өсөн юллыҡ запасын туплай. Нимәләр сәсә, нимәләр үҫтерә. Йәннәттең матур, ләззәтле тормошо кешеләргә был донъяла эшләгән ғәмәлдәренә ҡарап биреләсәк. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

***"Уларға: "Донъяла ҡылған ғәмәлдәрегеҙгә ярашлы, ашағыҙ, эсегеҙ! - тип әйтеләр"*** (Ҡөрьән, 69:24).

Иманлыларҙың етәксеһе Али ибн Абу Талиб (р.ғ.) шулай тигән: "Был донъя - уның менән ғәҙел булғандарҙың ғәҙел урыны. Был донъя - уны аңлағандарҙың рәхәтлек урыны. Был донъяла Аллаһ Пәйғәмбәрҙәре ғибәҙәт иткән, Аллаһтың Китаптары индерелгән, һәм Аллаһтың фәрештәләре сәждә иткән урындар бар, был донъяла Аллаһтың эштәрен алып барған садиҡтар (праведник) йәшәйҙәр һәм Аллаһтың рәхмәтенә ирешәләр һәм Аллаһтың ярлыҡауына лайыҡ булалар. Был донъяны иртәгә бының өсөн үкенәсәк кешеләр генә әрләй. Ләкин бүтән кешеләр уны маҡтайҙар, сөнки ул зикр итеү урыны, һәм улар иҫкә алалар, ул уларға өгөт-нәсихәт бирә һәм улар нәсихәт алалар. Мин был донъяны әрләүселәргә, уның шәһүәләренә-әүрәткестәренә алданғандарға мөрәжәғәт итәм, әйт, ҡасан һәм нимә өсөн ул һинең ғәйепләүеңә лайыҡ булды, Иң һәйбәте шуны әйт: һине ул ҡасан, нимә менән алданы?".

ИДЕОЛОГИК (СӘЙӘСИ, СОЦИУМ ҠИММӘТТӘРЕН ҠАБУЛ ИТМӘҮ) СӘБӘПТӘР АРҠАҺЫНДА ЯҺАЛҒАН СУИЦИД

Тарихтың боролошо мәлдәрендә, бер режим икенсеһе менән алмашынғанда, ҡапма-ҡаршылыҡлы идеялар, ҡараштар бәрелешкәндә, ундай хәлдәр йыш ҡына була. 1917 йылғы революциянан һуң, унан аҙаҡ та яңы ҡоролош менән килешә алмағандар үҙ иректәре менән был донъянан киттеләр. 70 йылдан һуң ваҡиғалар йәнә ҡабатланды. Совет ҡоролошо юҡҡа сыҡҡандан һуң, ҡай берәүҙәр бының менән риза булманылар һәм ҡул һалыу осраҡтары теркәлде. Шулай ҙа булыуы ихтимал, кеше, мәсәлән, тыныс, тотороҡло тормошта көн итә, бер заман бүтәндәр һымаҡ фекер йөрөтмәүен тоя, ул йәмғиәт ҡушканса йәшәмәй булып сыға. Шул саҡта үҙен-үҙе юҡ итеүҙе иң ҡулай сара, тип уйлай. Әлбиттә, йәнен ҡыйып, йәмғиәт тормошон хатта еңеләйтте һымаҡ: хәҙер алйот идеялары менән берәүҙең дә башын ҡатырмай, реформалар үткәрергә саҡырып, берәүҙе лә ялҡытмай... Ләкин үҙе өсөн нимә эшләне һуң ул? Кешеләр: "Былай насар егет булманы-булыуын, үҙ ҡарашы бар ине, сәйер булһа ла, принципиаль ине", тип әйтерҙәр. Кешеләр күп нәмә әйтер, ләкин йәнен ҡыйыусы инде үҙенә лә, бүтәндәргә лә бер нәмә лә иҫбатлай алмай ҡараңғы гүрҙә ятыр. Ә Ислам, кешегә ғүмер биреп, ошо мәртәбәле Диндең идеалы өсөн көрәшкә саҡыра, ысынбарлыҡты яҡшыртыу өсөн үҙендәге бөтөн көстө тупларға ҡуша.

Ислам тарихында мосолмандарҙың әҙселектә ҡалып, бик әҙәрлекләнгән саҡтары йыш булды. Шулай уҡ бола, талаш, ығы-зығы, ҡан ҡойош мәлдәре лә. Иман һәм тәҡүәлек боҙоҡлоҡ һәм гонаһтар менән алмашынды, именлек - ҡурҡыу менән, байлыҡ - фәҡирлек менән, тура юл - аҙашыу менән, ә Иман - дәһрилек менән. Ләкин иманлы әҙәмдәрҙең бер ҡасан да үҙҙәренә ҡул һалғандары булманы. Сөнки мөъмин рухы менән бай, бөтөн байлығы - йөрәгендә, ҡайҙа барһа ла үҙенең ватанын таба.

Йәмғиәттең әхлағын йәки идеологияһын ҡабул итмәгәндәргә Ислам һижрә тураһында әйтә. Күсенеү. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

***"Иманға килгән Минең ҡолдарыма әйт, "Раббығыҙҙан ҡурҡығыҙ. Был донъяла яҡшылыҡ эшләгәндәргә яҡшылыҡ әҙерләнгән. Аллаһтың ере киң. Шул хаҡ, сабырҙарға әжере тулыһынса биреләсәк"*** (Ҡөрьән, 39:10).

Был донъя - һынау, Аллаһ кешене яҡшылыҡ менән дә яманлыҡ менән дә һынай, хаҡ әҙәм ике йөҙләнән айырылһын өсөн, һәр кеше үҙенең файҙаһына йәки зыянына дәлил туплаһын өсөн, Аллаһ Хөкөмөнөң ғәҙеллеген белһен өсөн. Иң ауыр һынауҙарҙың береһе - күнегелгән йәшәү рәүешенең үҙгәреүе, тотороҡһоҙлоҡ, ләкин Ҡорьән, Аллаһтың ере ҙур, кеше ҡайҙа ла Аллаһҡа ғибәҙәт итергә урын таба, бөтә урында ла ер йәшәү өсөн яраҡлы, тип белдерә. Кеше үҙенә оҡшаған ерҙе һайлай ала. Ислам ватанды, тыуған йортто һөйөүҙе тыймай, ләкин Ислам ватанды фетишка, кеше шунда тороп ҡалыр өсөн хатта боҙоҡлоҡ ҡылырға, иманһыҙҙға әйләнергә риза булған табыныу урынына әйләндереүҙе хупламай. Аллаһ Рәсүле (с.ғ.с.) үҙенең ватаны - изге Мәккәне бик яратҡан, нисек уны яратмаҫҡа мөмкин, ти инде? Уны бит Аллаһы Тәғәлә лә ярата. Ләкин ҡалдырып китергә кәрәк булғас, Рәсүл дә (с.ғ.с.), сәхәбәләре лә бер минутҡа ла шикләнмәй. Йөрәктәге иманды һаҡлау мөһимерәк.

Фәрештәләр ерҙәрен ҡалдырып китә алмаған, шул сәбәпән диндәрен тота алмаған кешеләргә мөрәжәғәт итеп, үкенес менән шулай тиҙәр:

***"Һеҙ күсенһен (һижрәт) өсөн Аллаһы Тәғәләнең ере киң ине түгелме ни?"*** (Ҡөрьән, 4:97).

Күсенеү Ҡаф тауы аръяғына китеү тигәнде аңлатмай бит әле. Фетнәнән һаҡланыр өсөн бер нисә километр ғына арыраҡ китергә, ҡала эсендә икенсе кварталға күсергә була. Стена артында аҡылын юйған күршеләрҙең, йәки иманһыҙ туғандарыңдың мыҫҡыл итеүе - хәсрәтләнер өсөн сәбәп түгел. Һәр нәмәнән сығыу юлы бар. Кеше динен һаҡлау йәки дини ғилемен үҫтереү өсөн ҡайҙалыр күсенеп китә икән, Аллаһы Тәғәлә ярҙамдан мәхрүм итмәй, тейешле ниғмәттәрен дә бирә. Ул әйтә:

***"Аллаһ юлында күсенеүсе (мөжәһир) Ер йөҙөндә үҙенә матур тороу урыны һәм күп муллыҡ табасаҡ. Әгәр ҙә кемдер өйөн ҡалдырып, Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә йүнәлеп, күсенеп китһә, һәм шунда әжәле етһә, уға әжерен биреү - Аллаһта. Аллаһ йомарт ярлыҡаусы, ғәфү итеүсе"*** (Ҡөрьән, 4:100).

Хатта ерҙәге барлыҡ ҡалалар, ауылдар боҙоҡлоҡ гонаһ менән тулған саҡта ла иманлылар өсөн Аллаһтың ере киң буласаҡ. Рәсүл (с.ғ.с.) әйтә:

***"Тиҙҙән мосолмандың иң һәйбәт малы һарыҡ буласаҡ, үҙенең Дине менән һәр төрлө фетнәнән ҡотолор өсөн, ул көтөү менән тау араларында, ямғыр яуған урындарҙа йөрөйәсәк".***

Әгәр ҙә кеше күсенә алмай икән, был да төшөнкөлөккә бирелергә сәбәп түгел, шуны һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк, Аллаһ мосолманға иң яҡшы сифаттар биргән, уны бүтән кешеләр өсөн файҙалы иткән, сөнки ул ҡалғандарҙы Тура юлға, Аллаһы Тәғәләгә иманға саҡырыусы, Йәннәткә илтеүе хаҡ юлға өндәп, уларҙы аҙашыуҙан ғазаптан ҡотҡарырыға тырышыусы. Аллаһ әйтә:

***"Һеҙ - кешелектең именлеге өсөн һайланып ебәрелгән иң яҡшы ҡәүем, изгелеккә өндәп, яманлыҡтан ваз кисергә саҡыраһығыҙ. Һәм һеҙ Аллаһҡа ышанаһығыҙ"*** (Ҡөрьән, 3:110).

Ә бит Ислам юлына өгөтләр өсөн йәмғиәттең әхлағы түбән төшөп, яҡшы сифаттары тәсһеҙләнгән мәлдән дә яйлыраҡ ваҡыт юҡ. Аллаһ был аятта мосолмандың башҡа кешеләрҙән өҫтөнлөгә - иманға һәм ғилемгә таянып, яҡшылыҡҡа саҡырыуҙа, боҙоҡлоҡтан тыйыуҙа икәнен әйтә. Шуны эшләмәһәләр, уларҙың өҫтөнлөгә лә юҡҡа сыға, һәм улар үҙҙәрен ураткан гонаһ әйләнәренә оҡшай башлай. Аллаһы Тәғәлә әйтә:

***"Улар (кафырҙар) һеҙҙең үҙҙәре кеүек уҡ иманһыҙ булыуығыҙҙы, (үҙҙәре менән) бер иш булыуығыҙҙы теләй"*** (Ҡөрьән, 4:89).

Иблис бер ҡасан да өгөтләүҙән туктамай, ул әүрәтә, алдата, ҡыҙыҡтыра, ымһындыра. Аллаһы Тәғәлә юҡҡа ғына шайтандың антын иҫегеҙҙә тоторға ҡушмай:

***"Ул (Иблис) әйтте: "Мине юлдан яҙлыҡтырғаның өсөн һинең тура юлыңда мотлаҡ уларға ҡаршы ултырасаҡмын. Һәм ант итеп әйтәм, уларға алдан да, арттан да, уңдан да, һулдан да яҡынлаясаҡмын, һәм һин уларҙың күпселеген шөкөр итә белмәгән итеп табасаҡһың"*** (Ҡөрьән, 7:16-17).

**(Дауамы бар).**